VII Межрегиональная научно-практическая конференция
«Городские башкиры»: традиции и современное общество, 2012 г.
Гатауллин Р.Ш., заместитель руководителя Башкортостанстата.

VII Төбәк ара ғилми-ғәмәли конференция
«Ҡала башҡорттары»: йолалар һәм хәҙерге заман йәмғиәте, 2012 й.
Ғатауллин Р.Ш., Башҡортостанстат етәксеһе урынбаҫары

**Башҡорт теле XX быуатта – һандар һәм һығымталар,
йәки статистика мәғлүмәттәре был турала нимә һөйләй.**

**(Башкирский язык в XX веке – цифры и выводы,
или что говорят об этом статистические сведения)**

Йәмғиәттең йәшәйешен һан күрһәткестәре аша фәнни нигеҙҙә өйрәнеүсе тармаҡ булараҡ, статистика хеҙмәте айырым халыҡтарҙың тел үҙенсәлектәрен мөмкин тиклем даими күҙәтеп бара. Үткән быуатта ил күләмендә уҙғарылған халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре этнолингвистика йүнәлешен тикшерергә, өйрәнергә һәм нигеҙле һығымта яһарға мөмкинлек бирә. Билдәле булыуынса, тотош ил буйынса халыҡ иҫәбен алыуҙар 1897, 1926, 1939, 1959, 1970, 1979, 1989, 2002, 2010 йылдарҙа үткәрелде. Һәр береһендә кешеләргә милләте, урыҫ телен белеүе, туған теле ниндәй булыуы һәм тағы ниндәй тел йәки телдәр белеүенә ҡағылышлы һорауҙар бирелде. Был һан күрһәткестәрен өйрәнгәндә, сағыштырғанда һәм һығымта яһағанда һәр йылғы халыҡ иҫәбен алыу тәртиптәрен, кешеләргә бирелгән һорау төрҙәрен, мәғлүмәттәрҙе дөйөмләштергән һөҙөмтәләрҙе күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа кәрәк[1]. Әйтәйек, 2002 йылда кешеләрҙең туған теле тураһында мәғлүмәтте дөйөмләштереү мөмкинлеге булманы, йәки 1970 йылғы иҫәп алыуҙан башлап ҡына кешеләрҙең туған телдән башҡа тағы ниндәй телдәр белеүе өйрәнелә. Төрлө йылдар мәғлүмәтен бер-береһе менән сағыштырғанда төбәк сиктәренең тап килмәүе иҡтибарға алынырға тейеш. Әйтәйек, 1897 йылғы Өфө виләйәте һәм 2010 йылғы Башҡортостан Республикаһын туранан-тура сағыштырып һығымталар яһағанда һаҡ булырға кәрәк.

Рәсәй империяһында 1897 йылда үткәрелгән беренсе дөйөм халыҡ иҫәбән алыу барышында кешеләрҙең милләте тураһында мәғлүмәт йыйылманы, тик

туған теле ниндәй булыуы ғына асыҡланды. Туған телем башҡорт теле тип күрһәтеүселәр һаны ил буйынса 1321363 кеше ине, йәки илдәге дөйөм халыҡ һанының 1,1%. Шул иҫәптән вилайәттәр буйынса: Өфө – 899910 (вилайәттәге дөйөм халыҡ һанының 40,9%), Ырымбур – 254561 (15,9%), Пермь – 85395 (2,9%), Һамар – 57242 (2,0%), Вятка – 13909 (0,5%), Һарытау – 1262 (0,1%) кеше[2].

Артабан мәҡәләлә күрһәтелгән мәғлүмәт тик Башҡорт АССР-ы һәм Башҡортостан Республикаһына ғына ҡағыла[3]. Киләсәктә ил күләмендәге мәғлүмәттәр менән тулыландырыуҙы талап итә.

1926 йылда үткәрелгән Бөтә союз халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса Башҡорт АССР-да бөтәһе 2665836 кеше йәшәп, шуларҙың 625845-е башҡорт булған (23,5%). Башҡорт телен туған теле итеп танығандары 336826 кеше, йәки башҡорттарҙың 53,8%. Башҡорт теле республикала йәшәгән бөтә халыҡтың 345327-һендә туған теле булып танылған, йәки 12,9%. Тимәк, 8501 башҡа милләт кешеһе башҡорт телен туған теле тип һанаған. Әммә, башҡорт телен белеүселәр үрҙәге һандар менән генә сикләнмәй, сөнки 1926 йылғы иҫәп алыуҙа башҡа мәғлүмәттәр йыйылмаған һәм дөйөмләштерелмәгән.

1939 һәм 1959 йылдарҙа ла башҡорттар араһында башҡорт телен туған тел тип танығандар һанын ғына әйтеп була. Ә инде башҡорт телен белгән башҡа милләт кешеләренең күпмелеген, уларҙың күпмеһе башҡорт телен туған теле итеп таныуҙарын, шулай уҡ башҡорттарҙың күпмеһе телде белеп тә башҡа телде туған телем тип йөрөүҙәре билдәһеҙлек булып ҡалды. 1939 йылда республикала 3158969 кеше йәшәһә, уларҙың 671188-е башҡорттар, йәки бөтә халыҡтың 21,3% булған. Башҡорт телен туған тел тип таныусылыр башҡорттарҙың 54,3% булһа, бөтә халыҡ һанына ҡарата – 11,6% тура килә. 1959 йылда күрһәткестәр былай булған: республикала бөтә халыҡ һаны – 3336289 кеше, башҡорттар – 737711, башҡорт телен туған тел тип таныусы башҡорттар – 424577 кеше. Башҡорттарға ҡарата – 57,6%, респубикалағы бөтә халыҡ һанына ҡарата – 12,7%.

1970, 1979, 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу йомғаҡтары этнолингвистика буйынса тулыраҡ мәғлүмәт бирә. Әммә, улар башҡорт телен туған тел тип таныусыларҙы теүәл билдәләй алыу менән бергә, күпме кеше башҡорт телен белеүҙәрен аныҡ ҡына әйтә алмай. Сөнки, халыҡ иҫәбен алыу ҡағыҙындағы һорауҙар теҙмәһе урыҫ телен белеүҙе һәм туған телде аныҡлау менән бергә, илдәге башҡа халыҡтарҙың телен белеүҙе асыҡлағанда бер генә яуап ҡабул итте. Был сикләүҙәр мәғлүмәтте дөйөмләштергәндә тыуасаҡ ҡатмарлыҡтарҙы кәметеүгә бәйле ине. Күп милләтле Башҡортостанда кешеләрҙең бик йыш өстән дә артыҡ тел белеүе күҙәтелә. Республика күләмендә бындай осраҡтар тиҫтә меңгә етеүе ихтимал, әммә ул йылдарҙағы иҫәп алыу йомғаҡтары аша был фаразды дәлилләп булмай.

| Халыҡ иҫәбен алыу йылдары | Бөтә халыҡ (кеше) | Башҡорттар (кеше) | | | Башҡорт телен белеүсе башҡа милләт кешеләре (кеше) |
|---|---|---|---|---|---|
| | | Бөтәһе | Башҡорт телен белеү-селәр | Туған тел тип иҫәпләү-селәр | |
| 1970 | 3814926 | 892248 | 567590 | 563702 | 7520 |
| 1979 | 3844280 | 935880 | 607811 | 602913 | 6473 |
| 1989 | 3943113 | 863808 | 652531 | 645351 | 7819 |

Рәсәй Федерацияһы кимәлендә 2002 йылда ойошторолған халыҡ иҫәбен алыу тәртибе, телгә ҡағылышлы һорауҙар теҙмәһе үрҙә иҫкә алынған етешһеҙлекте күҙҙә тотоп төҙөлгәйне. Рәсми раҫланған һәм үҙәк гәзиттә баҫтырылған иҫәп алыу ҡағыҙында урыҫ телен белеү, туған тел, башҡа телдәрҙе белеү тураһында өс яуап яҙырлыҡ һорауҙарҙан тора ине. Әммә, ҡайһы бер ғалимдарҙың ныҡышмалығы арҡаһында иҫәп алыу тәртибенә үҙгәрештәр индерелде[4]. Анкетанан туған телгә ҡағылышлы тура һорауҙы төшөрөп ҡалдырылып, башҡа телдәр тураһындағы һорауға өҫтәмә рәүешендә генә бирелде. Ғилми ҡануниәткә тап килмәгән был үҙгәреш иҫәпселәр өсөн ҙур ҡатмарлылыҡ тыуҙырҙы. Һөҙөмтәлә, иҫәп алыу йомғаҡтарын

дөйөмләштергәндә, туған тел тураһында мәғлүмәттәр алып булманы. Ә шулай ҙа, ниндәйҙер телде белеүселәр һанын аныҡ ҡына билдәләй алдыҡ. Әйтәйек, башҡорт телен белеүселәр Рәсәй күләмендә 1379727 (0,95%), Башҡортостанда 1056871 (25,8%) кеше булыуы асыҡланды[5]. Бындай тулы мәғлүмәт ил тарихында беренсе тапҡыр барлыҡҡа килде. Күреүегеҙсә, был һандар совет заманындағы иҫәп алыу йомғактарынан ҡырҡа айырылып тора һәм алда әйтелгән фаразды дәлилләй. Башҡорт телен белеүсе милләт вәкилдәре һаны быны яҡшы күрһәтә: башҡорттар – 912204, татарҙар – 109799, урыҫтар – 14765, сыуаштар – 9126, марыйҙар – 3548, удмурттар – 2921, башҡа халыҡтар – 4449 кеше. Башҡорт телен белеүсе кешеләр күпләп йәшәгән (3 мең кешенән артыҡ) төбәктәр исемлегенә Силәбе – 133389, Ырымбур – 45973, Төмән – 32668, Свердловск – 22451, Ҡурған – 14203, Пермь – 12701, Һамар – 6145, Һарытау өлкәләре – 3038, Татарстан Республикаһы – 11765, Мәскәү ҡалаһы – 3264 кеше инә. Рәсәйҙең һәр төбәгендә башҡорттар, йәки башҡорт телен белгән кешеләр йәшәүен дә әйтеп китергә кәрәк. Был күренеште лә тулыһынса 2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыу йомғаҡтары аша күреп була.

2010 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәрен дөйөмләштереү эштәре әлеге ваҡытта тамамланыу өҫтөндә. Бөтә йомғаҡтар 2012 йыл дауамында алынып бөтәсәк һәм артабан статистик йыйынтыҡтар итеп баҫтырыласаҡ. Шулай ҙа тел мәсьәләһенә ҡағылышлы ҡайһы бер мәғлүмәтте иғлан итеп була. 2010 йылдың 14 октябренә ҡарата башҡорт телен белеүселәр Рәсәй күләмендә 1152404 (0,83%), Башҡортостанда 935810 (23%) кеше теркәлгән[6]. 2002 йылғы күрһәткестәр менән сағыштырғанда был һандың ил буйынса 227323 кешегә, ә республика буйынса 121061 кешегә кәмеүе күҙәтелә. Борсолорлоҡ һандар!

Был күренеш нимәне аңлата һуң? Һуңғы йылдарҙа республика күләмендә уҡыу йорттарында башҡорт телен уҡытыуҙы әүҙем ойошторған ваҡытта кире нәтижә ҡайҙан барлыҡҡа килгән? Килеп тыуған һорауға бер ҡатлы ғына итеп яуап биреп тә булмай, сөнки тормоштағы һәр бер үҙгәрештең сәбәптәре бик күп. Уйламай ҡысҡырырға яратҡан «белгестәр» был киҫкен үҙгәреште әлбиттә «алдаҡ» статистикаға япһарасаҡ. Сирек быуаттан ашыу ғүмеремде шул

хеҙмәткә бағышлаған кеше булараҡ, улар менән киләшә алмайым. Минең уйымса, башҡорт телен белеүселәр һанының ҡырҡа кәмеүенең төп сәбәбе булып быуындар күсәгилешлегенең йоғонтоһо ята. Башҡорт телен яҡшы белгән оло быуын вәкилдәре был тормоштан китә, ә уларҙың урынын туған теленә битараф булған урта һәм йәш быуын вәкилдәре алмаштыра. Шуға күрә, башҡорт телен уҡыу йорттарында әүҙем уҡытыу ғына килеп тыуған күренеште туҡтата алмаясаҡ. Башҡорт телен тормошта киң ҡулланыу даирәһен алға сығармайса, уны эҙмә-эҙлекле йәшәйешебеҙгә һеңдермәйсә тороп, ыңғай нәтижә көтөү урынһыҙ.

ЮНЕСКО 2009 йылда башҡорт телен «Юғалыу ҡурҡынысы янаған донъя телдәре Атласы»[7]на индерҙе. Был «ҡыңғырау» башҡорт зыялыйҙарына уйланырға, кисектермәҫтән нигеҙле ҡарарҙар ҡабул итеп, уларҙы тормошҡа ашырырға ҡуша түгелме һуң? Тарихи Башҡортостан[8] ерҙәренә килеп төпләнгән[9] башҡа милләт вәкилдәренә ҡарата толерантлыҡ[10] һаҡлайбыҙ тип, үҙ милләтебеҙҙең төп мәҙәни байлығы булған телебеҙҙе юғалтыуға дусар ителгәнбеҙ. Урыҫ милләте мәнфәғәтенән сығып ике тапҡыр яҙма хәрефебеҙҙе алмаштырған[11] дәүләт вариҫтарынан беҙҙе бындай көнгә ҡалдырғандары өсөн хаҡ – башҡорт халҡын, башҡорт телен, башҡорт мөхитен ҡурсалаусы айырым федераль ҡануниәт талап итеп дәғүә белдерергә хоҡуғыбыҙ бар.

Башҡорттар, йоҡонан уянырға ваҡыт!

---

[1]Ганиев А.М. Особенности изучения этнолингвистического состава в переписях населения. // Современные этнополитические и этносоциальные процессы в России: модель Республики Башкортостан: Материалы Межрегиональной научно-практической конференции (Уфа, 3 декабря 2004г.). – Уфа: Информреклама, 2004. – 352 с. – с. 157-162.

[2]Первая Всеобщая перепись населения Российской Империи 1897 г. Под ред. Н.А.Тройницкого. т.II. Общий свод по Империи результатов разработки данных Первой Всеобщей переписи населения, произведенной 28 января 1897 года. С.-Петербург, 1905. Таблица XIII. Распределение населения по родному языку.

[3]Население Башкортостана: XIX-XXI века: статистический сборник / Территориальный орган Федеральный службы государственной статистики по Республике Башкортостан. – Уфа: Китап, 2008. – 448 с.: ил.

[4]Вписались в историю. / Андрей КАМАКИН. "Итоги", 22 октября 2002 года. http://demoscope.ru/weekly/2002/085/perepis08.php

[5]Башкиры в начале XXI века: Статистический сборник. – Уфа:Башкортостанстат, МСОО ВКБ, 2008. – 194 с.

[6]Итоговые таблицы ВПН2010 «Население Российской Федерации по владению языками» http://www.gks.ru/free_doc/new_site/perepis2010/perepis_itogi1612.htm и «Население Республики Башкортостан по владению языками».

[7]Сайт ЮНЕСКО http://www.unesco.org/culture/languages-atlas/en/atlasmap/language-id-334.html

[8]Башкортостан (исторический). / Русская Википедия. http://ru.wikipedia.org/wiki/Башкортостан_(исторический)

[9]Рахматуллин У.Х. Население Башкирии в XVII-XVIII вв. Вопросы формирования небашкирского населения. М., 1988; История Урала в период капитализма. М., 1990.

[10]Хамитов Р.З. http://www.bashinform.ru/news/310594/ , Мичурин А.В. http://www.igianrb.ru/sotrudinki/michurin и другие.

[11]Красовицкая Т.Ю. Модернизация России: Нац.-культ. политика 20-х гг. / РАН. Ин-т рос. истории. – М., 1998. – 414 с.